*Закир ШАКИРОВ*

# Аҡмулла исемен — халыҡ-ара кимәлгә

Башҡортостан Республикаһы Президенты М.F.Рәхимов 19 ғинуарҙа Башҡортостанда йыл һайын башҡорт һәм башҡа төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән мәшһүр шағир-гуманист һәм мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың Халыҡ-ара көндәрен үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Сара быйылдан башлап декабрь айының тәүге яртыһында ойошторолаcаҡ. Халыҡ-ара Аҡмулла көндәрен ойоштороуға Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте йәлеп ителеп, эштәрҙең үтәлешен күҙәтеү Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтенә йөкмәтелә.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ошо йүнәлештә тупланған бай һәм күп яҡлы тәжрибәһе бар. Иң тәүҙә ул үткән 2006 йылды Аҡмулла йылы булараҡ билдәләү менән бәйле. Юбилей саралары ярайһы уҡ һөҙөмтәле булды, улар даими яҡтыртылып килде. Шул уҡ ваҡытта бөйөк шәхестең классик мәғрифәтселек дәүере тип танылған XIX быуат аҙағы — XX быуат башында Урал-Иҙел төбәгендәге дөйөм милли-мәҙәни үҫеш, демократик хәрәкәт процестарына индергән өлөшөн һәм унда биләгән урынын анығ күрһәтеп, исемен киңерәк даирәләргә сығарыу зарурлығы ла асыҡланды. Әйтергә кәрәк, ул дәүерҙәге процестарҙы өйрәнеүҙә беҙҙең һуңғы йылдарҙа бер ни тиклем ҡалыша башлауыбыҙ ҙа төҫмөрләнде.

Бөгөнгө көндә донъяла Урал-Иҙел төбәгенең тарихына, ундағы дөйөм демократик процестарға иғтибар ҙур. Электрон киң мәғлүмәт селтәрҙәре үҫеше һөҙөмтәһендә, сит ил авторҙарының хеҙмәттәре лә беҙҙә хәҙер ярайһы уҡ билдәле. «Ватандаш» журналы уларҙың ҡайһы берҙәрен үҙ биттәренә сығарҙы. Күрһәтелгән өлкәлә Америка Ҡушма

Штаттарында Хәмит Алғар, Хафиз Малик, Чарльз Стейнведел, Францияла Ксавье ле Торривеллек, Японияла Томохико Уяма һәм башҡа авторҙар әүҙемлек күрһәтә. Тема менән шөғөлләнгән фәнни үҙәктәр араһында Париж көнсығыш телдәр һәм цивилизациялар милли институты һәм Гарвард университетының Демократик үҫеш институты, Японияла Хоккайдо (Саппоро) университетының Славян тикшеренеүҙәре үҙәге айырылып тора. Күрһәтелгән авторҙарҙың һәм фәнни үҙәктәрҙең материалдары йыш ҡына беҙҙең төбәк халыҡтарының эволюцион үҫеш, цивилизациялы милләт булараҡ тупланыу үҙенсәлектәренә арнала. Ҡағыҙә булараҡ, улар ошо мөһим процестарҙың башланғысын классик мәғрифәтселек дәүеренә тоташтыра. Ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, француз Александр Беннигсен, Аҡмулла исемен дә иҫкә алып, уны төрки донъяһы тарихындағы күренекле шәхестәрҙең береһе тип күрһәтә.

Мифтахетдин Аҡмулла (Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдин улы, 1831—1895) үҙе рухи остазы тип Шиһабетдин Мәржәниҙе күрһәтә, шуны ижадында ла нығытып ҡалдыра. Мәҫәлән, «Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе» әҫәрендә «Мәржәни — Тимер Ҡаҙыҡ!» тип белдерә. Ысынлап та, ул осорҙа Мәржәни идеялары бик популяр булып, күптәрҙе мәғрифәтселек хәрәкәтенә ылыҡтыра. Ғабдулла Туҡай «Шиһаб хәҙрәт» шиғырында, Ризаитдин Фәхретдин «Мәржәни» йыйынтығында нәҡ уны мәғрифәтселеккә, Урал-Иҙел төбәгендә ислам реформацияһына — тәджәддүдкә нигеҙ һалып, уға тиклем хөкөм һөргән ислам догматикаһына ҡаршы сығыусы тип юғары баһалайҙар. Әммә Шиһабетдин Мәржәни үҙ сиратында остазы Ғәбдүнасир Ҡурсауи эшен — ислам реформацияһын дауам иттереүсе булараҡ билдәләй.

Мәржәни, уға тиклем Ҡурсауи дәүерендә Урал-Иҙел төбәгендә ислам реформацияһы башланыуға ниндәй нигеҙ булып, нимә этәргес көс ролен үтәй?

Төбәктә йәшәгән халыҡ әүәлдән ортодоксаль ислам догматикаһын ҡабул итмәй. 1773—1775 йылғы ваҡиғаларҙан һуң алдынғы шәхестәр исламда үҙ юлын эҙләргә керешә. Урта Азиялағы догматизм, Төньяҡ Кавказдағы ҡоралды көрәш юлы беҙҙең өсөн «кисәге көн» була. Төркөстанда, уның ислам үҙәге Бохарала әмирҙәр, уларҙың күршеләрендәге хандар халыҡты бөлгөнлөккә төшөрөп, һәр яҡлап милли-мәҙәни үҫешен сикләй. Ошо шарттарҙа исламдың сафлығын һаҡлаусы суфый тәриҡәттәренең йоғонтоһо көсәйә. Бохарала белем алыусы Ғәбдүнасир Ҡурсауи (1776—1812), һәр төрки кешеһе алла һүҙен тыуған телдә генә ишетергә тейеш, тип, төркисә тәфсир әҙерләй, Ҡөрьән китабын да тәржемәләргә йыйына. Бохара мөфтиҙәре диуаны Ҡурсауиға үлем язаһын билдәләгән фәтүә сығара, Бохара әмире уға ҡул ҡуя. Урал-Иҙел төбәгенә лә ошо фәтүәнең нөсхә күсермәләре ебәрелә. Әммә ошо мәлдә Нәҡшбәндийә тәриҡәте шәйехе Ниязҡолой әт-Төркмәни, ҡоралды ҡаршылыҡ күрһәтеү менән янап, Ғәбдүнасир Ҡурсауиҙы үлемдән ҡотҡарып алып ҡала. Мөртәт тип иғлан ителгән йәш имам үҙ яғына — хәҙерге Татарстандағы Ҡурса ауылына ҡайтып, яңы төр мәҙрәсә аса. Ҡурсауи, йәштәр уҡыу йортон-

да үҙ телендә белем алырға, уҡырға-яҙырға өйрәнергә тейеш, тип белдерә, төрки телдәрҙең грамматикаларын әҙерләү эшенә тотонорға саҡыра. Шәкерттәрен үҙ китаптары буйынса уҡыта башлай. Әммә оҙаҡламай ул тыуған яғын ташлап, шәкерттәрен эйәртеп, Төркиәгә китә. Төрөк солтаны уға Истанбулда төпләнеп, шәкерттәрҙе төрөк теленә өҫтөнлөк биреп уҡытырға рөхсәт итә. Үҙе вафат булғас, шәкерттәре таралып бөткәс, Урал-Иҙел төбәгендә Ҡурсауи тәғлимәте онотола.

Ләкин йәҙҙитселек, мәғрифәтселек идеялары йәшәй. Бөтә ислам донъяһында «төньяҡ төркиҙәре» тип билдәле башҡорттар һәм татарҙар араһында белемгә, мәҙәнилеккә ынтылыш арта. Ҡурсауи вафат булғандан һуң өс тиҫтә йыл үткәс, Шиһабетдин Мәржәни (1818—1889) уның төркисә яҙылған китабын табып, замандаштарын таныштыра башлай. Ислам тарихын, күренекле шәхестәрен өйрәнеп, төп хеҙмәтен — «Вафийәт әл-әсләф үә тәхийәт әл-әхләф» китабын яҙа. Замандаштарының ул заманда әле һаман ғәрәп теленә өҫтөнлөк биреүе менән иҫәпләшеп, әҫәрен ошо телдә сығара. Китабында ул, «исламды сафландырыу» ниәтенән сығып, мосолман тәғлимәтенең тәүге нигеҙҙәренә ҡайтыуға саҡыра, шуның аша саф, дөрөҫ ислам һәр саҡ яҡтылыҡҡа, камиллыҡҡа, мәғрифәтселеккә, мәҙәнилеккә ынтылырға тейеш, тип күрһәтә. Ғәмәлдә иһә ул шуның менән ислам реформацияһына өндәй. Ғәрәп телендә яҙып, төрки телдәр ғилми бәхәстәр алып барырлыҡ кимәлгә күтәрелергә, һүҙҙәргә байырға тейеш, тип раҫлай. Ҡазанда имам, мөҙәрис вазифаларын биләй, «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен ойоштороуҙа ҡатнаша. 1876 йылдан алып яңы асылған Татар уҡытыусылар мәктәбендә уҡыта. Ошо мәктәпте тамамлаған тиҫтәләгән кеше яҙыусы, Дума депутаты, юрист булып китә.

1880 йылда Шиһабетдин Мәржәни Истанбулда дәүләт етәкселәре менән осрашып, төрөк теле нигеҙендә милли мәғариф, мәҙәниәт үҫеше мәсьәләләрен өйрәнә. 80-се йылдарҙа 6 томлыҡ ифрат ҙур күләмле, бай йөкмәткеле «Вафийәт әл-әсләф үә тәхийәт әл-әхләф» китабын тамамлай һәм 2 томлыҡ «Мостафад» китабына тотона. Беренсе томында Ҡарғалы, Бөгөлмә, Бәләбәй, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Минзәлә, Ағрыз һәм башҡа төбәктәрҙең рухи тормошо тарихын, икенсеһендә күренекле шәхестәренең тәржемәи хәлен, хеҙмәттәрен тасуирлай. Ошо төп хеҙмәттәрендә ул ислам динен мәғрифәтселек юлына күсереү, милләтте үҫтереүгә йүнәлтеү мөмкинлектәрен асып күрһәтә — ғәмәлдә Ҡурсауи башлаған ислам реформацияһын дауам иттерә.

Ҡурсауи, Мәржәни, Аҡмулла һәм башҡа мәғрифәтселәрҙең донъяуи ҡараштары XIX быуат рус демократтары, Көнбайыш Европала нығынып килгән демократик традициялар йоғонтоһонда формалаша. Мәржәни, мәҫәлән, Европалағы Лютер реформалары, протестантизм, кальвинизм менән ҡыҙыҡһынып, был турала профессор И.Ф.Готвальд, академик В.В.Радлов менән кәңәшләшеп тора. Урал-Иҙел төбәгендә ислам реформацияһын теоретик яҡтан нигеҙләү өсөн Петербург ориенталистары В.Вельяминов-Зернов һәм шәйех әт-Тантауи менән осрашып, кәңәшләшеүе билдәле. Мәккә ғалимы Әхмәт әл-Кунъяуи Мәржәниҙең

реформация идеяларын хуплай. Америка Ҡушма Штаттары консулы бөйөк шәхес тураһында мәғлүмәт туплап, уны фотоға төшөрә. Британия энциклопедияһы редакцияһы хеҙмәткәрҙәре лә билдәле мәғрифәтсе-реформаторҙың фотографияһын алып, уның тураһында белешмә әҙерләй. Шулай итеп, Ҡурсауи, Мәржәни, Аҡмулла кеүек классик мәғрифәтселек дәүере әһелдәре Урал-Иҙел төбәгендәге ислам традицияларынан тыш, бөтә Рәсәй, Европа кимәлендәге дөйөм цивилизация, мәҙәниәт үҫеше процестарына яҡын тороп эш итә. Тарихи яҡтан был хәл геосәйәси фактор менән аңлатыла. Ярайһы уҡ юғары дөйөм мәҙәни кимәл, мәғариф селтәренең үҫешеүе нәҡ беҙҙең төбәктә исламдың плюралистик һәм күп яҡтан универсаль төрө формалаша башлауға этәргес бирә. Ғәрәп мосолман реформаторҙары (Ямалетдин әл-Әфғани, Мөхәммәт Әбдү һәм башҡалар), төрөк лидерҙары бөгөнгө исламизмға нигеҙ һалып, шул уҡ ваҡытта мосолман донъяһында байтаҡ ҙур ҡаршылыҡтар үҫеп сығыуға булышлыҡ итте. Донъя исламизмының төп идеологы әл-Әфғани (1849—1896) постулаттарына эйәреү күп халыҡтарҙы емерткес фанатизмға, һуғыш юлына этәрҙе. Ул постулаттар мәҙәни, иҡтисади үҫеште, мәғрифәтселекте, хатта милли үҫеш мәсьәләләрен тупаҫ рәүештә ситкә этәреп, глобаль кимәлдә — бөтә донъяла ислам байрағын күтәреүгә саҡыра. Ямалетдин әл-Әфғани тәғлимәтен дауам иттереүсе Хәсән әл-Банна (1906—1949) Көнбайыш Европа һәм Америка Ҡушма Штаттарына ҡаршы киң масштаблы, глобаль ҡаршы тороуға, бөтә донъя мосолмандарын берләштергән «Әл-Ватан әл-ислами» донъя конфедерацияһын төҙөүгә өндәй. Әл-Әфғаниҙан айырмалы рәүештә, әл-Банна мосолман халыҡтарының үҙ милли дәүләттәрен төҙөүгә, тел, мәҙәниәт, мәғариф өлкәһендәге үҫешкә ынтылыштарын яҡларға саҡыра. Донъя исламистарының һуңғы лидерҙары, мәҫәлән, Сәйет Ҡотб (1906—1965), милли үҫеш идеалдарын бөтөнләй инҡар итеп, барлыҡ донъяны ике өлөшкә бүлә. Унынса, Дар әл-ислам (ислам донъяһы) башҡа донъяға (Дар әл-харб — харап булған донъя) ҡаршы көрәшкә күтәрелергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта исламистарҙың бер өлөшө, мәҫәлән, «ислам социализмы» доктринаһы авторҙары Мостафа әс-Сибаи, Мөхәммәт әл-Ғаззали, барлыҡ мосолман халыҡтарының үҙ милли дәүләттәрен төҙөүгә хоҡуғын яҡлап, мәҙәниәттәрен, милли мәғариф системаһын ирекле рәүештә үҫтереү идеяһын күтәрә. «Ислам социализмы»ның төп идеологы әл-Ғаззали «Ислам һәм социалистик концепция» китабында милләттәрҙең ирекле үҫеше өсөн донъяны капитализм һәм коммунизмдан арындырырға саҡыра. Исламистарҙың радикаль өлөшө, ҡағиҙә буларак, экстремистик ысулдарға өҫтөнлөк бирә. Төп һөжүм объекты тип АҠШ, Көнбайыш Европа илдәре, Израиль күрһәтелә. Ирактағы һуғыштан, Нью-Йорктағы 11 сентябрь фажиғәһенән, ислам экстремистарының төрлө илдәрҙәге бихисап провокацияларынан һәм террористик акттарынан һуң, донъялағы барлыҡ прогрессив көстәр мосолман илдәрендәге һәм улар тирәһендәге хәлдәрҙе ҙур борсолоу менән күҙәтеп, төрлө ысулдар тәҡдим итә. Көнбайыш илдәре хәрби көс ҡулланыуға, донъя финанс механизм-

дарын йәлеп итеүгә өҫтөнлөк бирә. Шул уҡ ваҡытта көслө иҡтисади үҫешкә, мәҙәни йәһәттән дә ҙур уңыштарға өлгәшкән мосолман илдәренең ыңғай тәжрибәһен таратыу идеяһы күптәргә яҡынырак. Һуңғы осорҙа Индонезия, Малайзия кеүек мосолман илдәренең йылдам үҫеше донъя сәйәсәтенә һиҙелерҙәй йоғонто яһай башланы. Төрки донъяһы яңырыу дәүере кисерә. Беҙҙең Урал-Иҙел төбәге халыҡтарының мәғрифәтселек өлкәһендәге оло тәжрибәһе донъя кимәлендә әһәмиәтле булыуы мөмкин, сөнки нәҡ беҙҙең төбәктә ислам реформацияһы баш ала. Исламдағы фундаментализм һәм традиционализм артабанғы үҫеште тотҡарлаған мәлдә нәҡ реформация идеялары глобаль кимәлдәге кризистан китеү юлдарын асыуға һәләтле. Реформаланған цивилизациялы ислам Урал-Иҙел төбәгендә тарихи һынау үтеп, сәйәсәттән һәм милли хәрәкәттән айырылып, хәҙер культурологик функциялар менән генә сикләнһә лә, ул, классик мәғрифәтселек дәүере әһелдәре мираҫынан күренеүенсә, әле лә көслө ижади потенциалға эйә. Фундаментализм, экстремизм етди проблемаға әйләнгән осорҙа ул тәжрибә, потенциал айырыуса мөһим. Көнбайыш сәйәсмәндәре, дәүләт етәкселәре, айырыуса Францияла, Англияла, башҡа Көнбайыш илдәрендә ислам экстремизмына ҡаршы «евроислам» феноменын ҡуйырға тәҡдим итә. «Евроислам» идеялары, аналитиктар фекеренсә, хәҙер Көнбайышта популярлашып, Рәсәй Федерацияһының сәйәси тормошона ла үтеп инеүе ихтимал. Әммә ул модернизацияланған, Европа һәм Америка шарттарына яраҡлаштырылған, ундағы университеттарҙа, ғилми үҙәктәрҙә, Гарвард, Лэнгли лабораторияларында әҙерләнгән идеология. Шуға күрә үҙебеҙгә хас, тәрән тарихи нигеҙле модель алып, уға культурология элементы функцияһы биреп, тәҡдим итеү, пропагандалау мөһим. Республикала мосолман мәғарифы селтәре тергеҙелә башлаған осорҙа, мәҙрәсәләр, ислам институттары, университет асылғанда, ундағы уҡыу системаһы дәүләт стандартына яраҡлаштырылғанда, уларҙың конфессия-ара һәм милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыуға йүнәлтелеүе мөһим. Ниһайәт, был үҙ тарихыбыҙҙы тәрәнерәк аңлау, аңлатыу өсөн дә кәрәк. Әгәр беҙ классик мәғрифәтселек дәүеренең иң билдәле шәхестәренең береһе Мифтахетдин Аҡмулла мираҫын, идеяларын халыҡ-ара кимәлгә күтәрергә теләйбеҙ икән, ул шәхесте, мираҫты, идеяларҙы барлыҡ тулылығында күҙ алдына килтереү өсөн үҙебеҙҙең Урал-Иҙел төбәгендәге классик мәғрифәтселек хәрәкәтенең үҫеш логикаһы, барышы, башҡа мәғрифәтселәрҙең мираҫы менән берлектә ҡабул итергә тейешбеҙ. Нәҡ шундай күп яҡлы, төплө аналитик ҡараш милли үҫеш, суверенитетты үҫтереү, хоҡуҡи дәүләт төҙөү, граждандарҙың һәм халыҡтарҙың тиң хоҡуҡлығын тәьмин итеү менән бәйле бөгөнгө проблемаларҙы тарихи йәһәттән тулыраҡ аңлау мөмкинлеге бирә, ошо проблемалар тәү башлап классик мәғрифәтселек дәүеренең бөйөк шәхестәре, шул иҫәптән Аҡмулла тарафынан күтәрелгәнен, Аҡмулла идеялары әле лә актуаль булып ҡалыуын раҫлай.